ПУБЛИЦИСТИКА

*Таңсулпан ҒАРИПОВА*

# Тамараның «Кесе Ер»ҙәре

**Очерк**



*Тамара Уляшина*

Сибай ҡалаһы ҡышҡы һалҡынлығы, һорғолт битарафлығы менән ҡаршы алды Тамараны. Йәйен, әлбиттә, Сибай икенсерәк, йәнлерәк, ҡупшыраҡ, һөйкөмлөрәк күренә ине. Ә ҡышын башҡасараҡ икән. Әсе еле кейем аша үтеп, елеккә үткәндәй. Күп ҡатлы йорттар уға туң быяла аша ятһынып ҡарағандай. Ирекһеҙҙән Ейәнсураһы, уның тау-урмандар менән ҡапланған гүзәл тәбиғәте күҙ алдына килә. Эйе, гүзәл тәбиғәте, бала саҡтан таныш яҡын йөҙҙәр, һәр тыҡрығына, ҡоймаһына тиклем ҡәҙерле урындар... Әммә күңел болоҡһоуҙарына, хәтирәләргә бирелергә уның, Сибай ҡалаһы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләнгән Уляшина Тамара Станиславовнаның, ваҡыты юҡ. Әлегә уға ятһынып ҡараған тәҙрәләр эсендәге фатирҙа тормош ҡайнай. Балалар, ололар, хеҙмәткәрҙәр — барыһының да яҙмышы социаль-гуманитар хеҙмәт аша үтә. Ә бөгөн 29 декабрь. Танау осонда — Яңы йыл. Яңы йыл шыршыһы, Сибай ҡалаһында кем баш, кем етәксе булһа ла, 31 декабрҙә ҡабынырға тейеш!

Эшләгәнгә эш ҡарышмай. Тамара йәштән хөкүмәт эшендә йөрөгәнлектән, байтаҡ тәжрибә туплаған. Тәжрибә тупларға уның ваҡыты етерлек булды: Стәрлетамаҡ педагогия институтының математика факультетын да ситтән тороп тамамларға тура килде — уҡыу йылдарында ул комсомолдың Ейәнсура район комитетында эшләне. Ғөмүмән, райком хеҙмәткәре ғаиләһендә тыуып үҫкән Тамара үҙен белгәне бирле ошо мөхиттә ҡайнай, эргә-тирәһендәге даирә лә уға яҡшы таныш. Эш бер нәмә, ә өй — икенсе тигән төшөнсә уның өсөн ят. Хәтерендә, бер саҡ әсәһе Людмила Васильевна, сарафан кейгән килеш магазинға йыйынған ҡыҙын күреп, шелтәләгәйне. Башҡаса улай итмәне Тамара. Әсәнән күргән — тун бескән тигәндәй, әсәһенән ул, ысынлап та, күп нәмәгә өйрәнде. Тормошта ниндәй хәлдәр булмай! Ә әсәһе, үҙенең эсендә ут булһа ла, кеше менән ихлас һөйләште, асыу һаҡламаны, бөтәһен бер тигеҙ яратты, шуғалыр ҙа уның үҙен дә яраттылар.

Заманында Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу техникумын тамамлаған, пианинола оҫта уйнаған, матур йырлаған әсәһе Людмила Васильевна Тамараның эстетик донъяһын формалаштырһа, атаһы, элекке хәрби хеҙмәткәр Станислав Васильевич Уляшин, балаларында үҙаллы, ижади фекерләү тәрбиәләргә тырышты. Тамара үҙен белгәндән алып, уларҙың ғаиләһе һәр саҡ «Моделист-конструктор» журналын алдырҙы. Станислав Васильевич балалары менән үҙе лә мауығып машиналар, самолеттар һәм башҡа нәмәләр төҙөнө. Ниндәй эштә эшләһә лә күңеле менән ижадсы ине. Өйҙәге бөтә йыһаз уның ҡулдары менән эшләнде. «Йәшәү шарттары яҡшы булһа ғына балалар тулы ҡанлы тәрбиә ала», — тиер ине. Нисек кенә ауыр булмаһын, яҡшы уйынсыҡтар, матур кейемдәр алырға тырыштылар. Әммә быларҙы һатып алыр өсөн аҡса кәрәк. Станислав Васильевич, мин райком кешеһе, тип ҡуҡырайып ултырмай. Ҡулы эш белгәс, аптырап тормай. Мебель, стендтар яһай — мәгәр сентябрҙә балаларын мәктәпкә өр-яңы, ялт итеп торған кейемдәр кейҙереп ебәрә...



*Атаһы*
*Станислав Васильевич*



*Әсәһе*
*Людмила Васильевна*

Әммә ата-әсәһе балаға ни ашатып, ни генә кейендермәһен, уларҙың ғүмере эштә үтә. Сабый күңеленең аң даирәһен өләсәйҙәре һәм ата-әсәһенең олаталары хаҡындағы хәтирәләре формалаштыра. Әҙәм балаһы үҫә төшкәс кенә беленә был. «Шул тиклем дә олатаһына оҡшамаҫ!» йә булмаһа «Ҡойған да ҡуйған өләсәһе!» тип аҙаҡ шул уҡ ата-әсәләр шаҡ ҡата. Тамара Станиславовна миҫалында ла быны күҙәтергә булалыр: өләсәһе Раиса Николаевна — тәүге комсомолка. Эшенә бик яуаплы ҡараған кеше була ул. Күгәрсен районындағы музейҙа уның хаҡында ла бик күп материалдар, хәтирәләр һаҡлана.

Улының, Тамараның атаһы Станиславтың, хәрби һөнәр һайлауы, аҙаҡ райкомда тәртип һәм теүәллек талап иткән эштә эшләүе тиктәҫтән булмағандыр. Үлән үҫкән ерендә үҫә, тиҙәр. Күрәһең, сабый Тамара күңеленә лә орлоҡто өләсәһе Раиса Николаевна һала. Орлоҡ үҫһен, тамыр ебәрһен өсөн, билдәле, уңай шарттар кәрәк. Ә ундай шарт — Уляшиндарҙың йәшәү рәүеше. Ҡыҙының райкомға эшкә инергә ризалыҡ биреүен ишеткән ата-әсәһе башта аптырап ҡала. Күрәһең, Станислав Васильевичтың күҙ алдына үҙе, ғаиләһе өсөн тамсы ла ваҡытын ҡалдырмай, бары эш өсөн йәшәгән әсәһе, шундай уҡ яҙмышлы башҡа ҡатын-ҡыҙ хеҙмәттәштәре килгәндер. «Бармайһың! — ти ул ҡыҙына. — Унда эшләһәң, әҙәм төҫлө ғаиләң, шәхси тормошоң булмаясаҡ!»

Ҡаты тора Станислав Васильевич. Мәгәр ҡыҙының холҡон да яҡшы белә: бер ҡарарға килдеме — әйткән һүҙенән ҡайтмай. Әле бик бәләкәй сағында, күп булһа йәш ярым тирәһе булғандыр, уларҙың ғаиләһе эш буйынса ауылға күсенеп килә. Кескәй Тамараның иғтибарын өй уртаһындағы бик ҙур мейес йәлеп итә. Мейестәге һикәлтәләргә, кәрнистәргә йәбешеп, мейес башына менергә була Тамара. Был шөғөлө арҡаһында бер түгел йөҙ йығылып төшә, ләкин һаман ынтыла, һаман менергә тырыша. Ҡыҙының имгәнеүенән ҡурҡҡан Станислав Васильевичҡа мейестең кәрнистәрен онтап, тотонорлоҡ урын ҡалдырмаҫлыҡ итеп тигеҙләп ҡуйыуҙан башҡа әмәл ҡалмай. Ҡыҙының башбаштаҡланып райкомға эшкә инеүенә асыу тотоп һөйләшмәй йөрөһә лә, ахыр сиктә Тамараның һайлаған юлынан кире ҡайтмаҫын йөрәге менән тойомлағандыр...

Раил Сәлих улы Сарбаев Сибай ҡалаһы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнгәс, Ейәнсура хакимиәте аппаратында эшләгән бер нисә хеҙмәттәшен үҙе менән бергә саҡыра. Улар араһында Уляшина ла була. Эйе, еңел булмаҫын белә ул. Ейәнсура — аграр район. Мәҙәниәт, нигеҙҙә, үҙешмәкәрлектән тора. Сибайҙа эш башҡаса: юғары, урта уҡыу йорттары, ғүмере етешәр тиҫтә йыл менән үлсәнгән профессиональ театр, профессиональ филармония, художество мәктәптәре, дауаханалар, күп һанлы мәктәптәр, гимназиялар, лицейҙар — барыһын һанап ҡына сығыу өсөн дә күп ваҡыт кәрәк. Әммә Тамара Станиславовнаға Раил Сәлих улы етәкселегендә эшләүе оҡшай. Етәксе булараҡ, Раил Сәлих улының Уляшинаға оҡшаған сифаты — ул үҙенең ҡул аҫтында эшләүселәрҙе ирекһеҙләмәй. Ауыҙлыҡ кейҙереп, уртыңды ҡанатмай, үҙенә ышанғандай ышана, иң мөһиме, ижади эшләргә ҡамасауламай. Тамара Станиславовнаға аҡыллы етәкселәр менән генә бер төпкә егелеп эшләргә тура килде. Егерме дүрт йәшендә партияның Ейәнсура район комитетына эшкә килгәндә тәүге һабаҡты ул Нәғим Ғәзиз улы Бикбаевтан алды. Ул идеология буйынса секретарь ине. Ул саҡта совхоз директорҙарының һәм колхоз рәйестәренең күбеһе юғары зыялы, зирәк, көслө кешеләр булды. Уляшина, йәшлегенә барып, йыш ҡына хата өҫтөнә хата яһаны. Уның арҡаһында етәксегә туҡмаҡ әҙ эләкмәне, әммә Нәғим Ғәзиз улы түҙҙе, сабыр булды, һәр саҡ ярҙам итте. Тамараны, парткабинет мөдире булып дүрт ай эшләгәндән һуң, пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире итеп үрләттеләр. Ирек Хәким улы Шаһиев менән дә тиҙ уртаҡ тел тапты Уляшина. Унан да күп нәмәгә өйрәнде. Әммә уның тормошонда бер тапҡыр шундай осраҡ та булды — етәксе менән уртаҡ тел таба алмағас, оҙаҡ уйлап торманы — эшенән китте.

Сибай — Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарының баш ҡалаһы. Баш ҡалаға баш ҡала бейеклегенән ҡарау кәрәк. Эштәр насар бармаһа ла, заман талабына ярашлы итеп, эште яңы стилдә ойоштороуға мохтажлыҡ юҡ түгел.

Иң беренсе планда — мәктәптәр. Уларҙың күбеһе заман талабына яуап бирмәй. Һанай китһәң, проблемалар, бурыстар байтаҡ. Театр, данлы үткәне, традициялары булыуға ҡарамаҫтан, ҡәҙимге өйҙән саҡ ҡына ҙурыраҡ бинала урынлашҡан. Яңы асылған сәнғәт училищеһы ла үҙенә айырым бина талап итә...

Эшләмәгән кешегә генә эш юҡ, белмәгәндең генә беләге тыныс. Тамара Станиславовна ла, һай, шәп урынға килеп эләктем, тип тынысланып, креслоға ҡырын төшөп ултырып, эшем эйәһе булып күренеп йәшәй ала ине. Юҡ. Унының тынғыһыҙ күңеле, һәр эште еренә еткереп эшләй торған реформатор холҡо тәүге көндән үк хәл итеүҙе талап иткән мәсьәләләрҙе билдәләне, бурыстарҙы асыҡланы. Улар, ысынлап та, байтаҡ булып сыҡты. Алдағы бурыстарҙы башҡарып сығыу, әлбиттә, бер кешенең генә хәленән килә торған эш түгел. Үҙе кеүек янып торған кешеләрҙән йыйылған команда кәрәк. Утын ағасы берәү генә булһа — яна, өсәү булһа — ялҡыны сыға, күп булһа — дөрләп, күккә аша. Тамара Станиславовна менән һәүетемсә генә эшләп булмаясағын аңлаған мәктәп директорҙарының ҡайһылары үҙҙәре эштән китә, бәғзеләренән урынды бушатыуҙарын һорарға тура килә. Уны тәү күргәндә боҙ һалҡынлығы бөрккән күңелдәр ваҡыт үтеү менән йомшай төштө. Уляшинаның эшһөйәр кешеләрҙе ихтирам иткәнен тиҙ аңланы халыҡ. Был аңлашыуға, бәлки, Тамара Станиславовнаның башҡаларҙан эш талап итеп, үҙе кабинетта талсығып ултырмауы ла ярҙам иткәндер. Кешеләр төнгә тиклем эшләй икән — ул да шунда булды. Бер ҡасан да башҡаларҙан иртәрәк ҡайтып китмәне. Үҙең өлгө булмаһаң, ҡоро һүҙгә кем ышана, кем эйәрә һиңә? Хәҙер ҡасан, ҡайҙа уҡығанын хәтерләмәй, мәгәр Бөйөк Ватан һуғышы осоронда Януш Корчакка — врач, педагог, директорға — геттонан ҡасыу мөмкинлеге барын әйткәстәре, ошондай яуап ишетәләр: «Балаларҙы нимәгә өйрәткәнемде, нимәгә тоғро булыуымды иҫбатлар сәғәтем һуҡты. Был — минең ғүмерлек эшем, һөнәрем — балаға тоғролоҡ». Ул шул тоғролоҡҡа тоғро булыуын газ камераһында үлемгә дусар ителгән ике йөҙ бала менән бергә ҡалыуы менән раҫлай. Директорға йәнә туғыҙ тәрбиәсе эйәрә... Бына шулай. Дөйөм эш хаҡына үҙеңде йәлләмәгәндә генә башҡалар өсөн шәхси өлгө күрһәтә лә, талап итә лә алаһың.

Эйе, ауыр бирелде Сибай. Һыҙланып, тешен ҡыҫып түҙҙе ул. Ауыр бирелгәнгә лә ҡәҙерле ул хәҙер Тамараға. Сибай ҡалаһы дауаханаһының баш табибы Р.Нагаевҡа ул етәкләгән дауахана республикала беренсе урынды алған өсөн диплом һәм сәскәләр тапшырғас, Нагаев ошо гөлләмәне унының ҡулына тотторҙо. Әллә ниндәй ҙур ваҡиға ла түгел, әлбиттә. Ә Тамара өсөн был оло ҡыуаныс ине. Әлбиттә, Тамара Станиславовна был ҡалала уны бөтәһе лә ҡабул итте, тип хәҙер ҙә әйтә алмай. Әммә хушлашҡанда дошмандан дуҫҡа, ә дуҫтан туғанға әйләнгәндәре күберәк булды. Хәҙер ул һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарын, Сибайҙың проблемаларына битараф булмаған кешеләрҙе һағына: Зөһрә Хәдит ҡыҙы Фәйзуллина, Дамир Мәжит улы Ғәлимов, Инга Акрамовна Илембәтова, Нина Федоровна Буркина унының тоғро кәңәшселәре булды. Күҙгә күренерлек, халыҡ хәтерендә ҡалырлыҡ эштәре лә бар: етемдәр өсөн приют асыу, театрға төкәтмә эшләтеп, Сибай халҡына яңы эстетик биҙәлешле театр бинаһы булдырыу, Салауат Юлаевҡа һәйкәл асыу, балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәбен, үҫмерҙәр ижад йортон, мәктәптәрҙе реконструкциялау һәм башҡалар. Һанай китһәң, байтаҡ. Ә шулай ҙа иң мөһим ҡаҙанышы тип Тамара

Станиславовна мәҙәниәт, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау етәкселәре араһында дуҫлыҡ, teләктәшлекте, бер-береңә ярҙамға килергә ынтылып тороу теләген тәрбиәләүҙә күрә. Ошо нигеҙҙә бик күп ҡатмарлы эштәрҙе еңеп сыҡтылар.

Был башланғыстың дауамын ул әле лә күҙәтә. Ринат Ишмуллин, мәҫәлән, Өфөгә, Милли йәштәр театрына директор булып күсеүенә ҡарамаҫтан, Сибай филармонияһын да, театрҙы ла берҙәй яҡын күрә, хәленән килгәнсә ярҙам итергә тырыша. Йылы хистәр һаҡлай Тамара Станиславовна Уляшина Сибай ҡалаһына, уның халҡына. Эйе, күңелдәрҙәге боҙҙо бары яҡтылыҡ, теләктең изгеһе, сафы, ысыны иретә. Быларҙы ул яҡшы төшөндө.

Сибайҙан киткәс, Хөкүмәт аппаратында ла эшләне Уляшина. Ындағы эш башлыса теоретик планда ине, ә Тамара — практик. Уға ҡағыҙ менән эш итеү түгел, ә тере кешеләр менән йәнле аралашыу кәрәк. Ейәнсурала, Сибайҙа эшләү уның үҙ-үҙенә ышанысын арттырҙы, тәжрибә лә тупланды. Шуға күрә лә Сибайҙа хакимиәт башлығы урынбаҫары булып оҙаҡ йылдар эшләгән, хәҙер Нефтекама ҡалаһына хакимиәт башлығы итеп күсерелгән Олег Анатольевич Руденко Уляшинаны үҙенә социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫар итеп саҡырғас, оҙаҡ уйламаны — ризалашты.

...Һәм бына ул тағы яңы урында. Бер кемде лә белмәй. Сибайҙағы кеүек, бында ла эшлекле команда кәрәк. Бында ла төрлөсә булыуы мөмкин. Тәбиғәте менән изге күңелле Тамара Станиславовнаның хатаға хаҡы юҡ. Хаталандың икән, үҙең өсөн генә түгел, теге йәки был етәксе өсөн дә эшләйһең. Сибай ҡалаһы мәғариф бүлеге етәксеһе итеп Гөлшат Ишмөхәмәт ҡыҙы Баянованы тәғәйенләр алдынан ете ҡат үлсәгәне, уйлағаны хәтерендә. Ул саҡта Уляшинаның яңылышмауын тормош үҙе иҫбатланы. Етәксе ҡатмарлы мәсьәләләрҙе сисә, ҙур бурыстар ҡуйып, ҙур проблемаларҙы хәл итә белергә тейеш. Нефтекама менән Сибай, бер ҡараһаң, оҡшаш та: икеһе лә сәнәғәт ҡалаһы. Айырмалары ла бар. Традициялары ла икенсерәк, сөнки ул Нефтекаманан «өлкәнерәк». Ә Нефтекама — йәшлек ҡалаһы. Бурыстар ҙа икенсерәк, талаптар ҙа башҡасараҡ.

Эйе, бурыстар күп. Әммә Уляшина уларҙан ҡурҡмай. Ауырыраҡ булған һайын уға йәшәү күңеллерәк. Тулҡындарға ҡаршы елкән киргән карап алтынсы, етенсе валдарҙы еңгән сағында әле туғыҙынсы вал барлығын белә. Ул шуға әҙерләнә. Яраткан эше унан, әлбиттә, ҡорбандар ҙа талап итте. Мәрхүм атаһы менән әсәһе хаҡлы булып сыҡты: Тамара балалар ярата, ләкин үҙенең балаһы юҡ. Ғаилә ҡорманы. Шәхси тормошҡа һәр саҡ ваҡыты ҡалманы. Әммә үкенес тә юҡ. Ейәнсура менән Сибайҙа ул үҙенең «Кесе Ер»ен тапты. Кем белә, бәлки, Нефтекама ла уның «Кесе Ер»енә әйләнер. Әммә Уляшина шуны белә: «Кесе Ер»ҙәр, ғәҙәттә, кешенең йә изге ҡаны, йә хәләл тире аҡҡан ерҙә ярала.